Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа № 23»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

Рабочая программа по учебному предмету
«Родной (башкирский) язык»

Уровень начальное общее образование
Классы 1-4
Срок реализации рабочей программы 2019-2023 год

1. Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәте предметын өйрәнеүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

- **Шәхсән һөҙөмтәләр**
- -уҡыусының мәктәпкә яҡшы ҡарашы кимәлендә эске позицияһы;
- -социаль, уҡыу, танып-белеү һәм тышҡы мотивтарҙы үҙ эсенә алған уҡыу эшмәкәрлегенең киң мотивациялы нигеҙҙәре;
- -яңы уҡыу материалына һәм уны эшләү сараларына ҡыҙыҡһыныу;
- -уҡыу эшмәкәрлегендә уңыш сәбәптәрен аңлауға ориентация;
- -үҙеңдең уҡыу эшмәкәрлегенә баһа бирә белеү;
- -гражданлыҡ нигеҙҙәре, үҙеңде «Мин» ғаилә ағзаһы, Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәүсе, халыҡ һәм Башҡортостан Республикаһы вәкиле, Рәсәй гражданины итеп ҡабул итеү;
- -төп әхлаҡи нормаларҙы белеү һәм буйһоноу;
- -оят, ғәйеп кеүек этик хистәрҙе үҫтереү;
- -сәләмәт тормошҡа ориентир;
- -экологик мәҙәниәт нигеҙҙәре: тәбиғәт донъяһы ҡиммәттәрен ҡабул итеү;
- -донъя һәм ватан мәҙәниәте нигеҙҙәре менән танышыу сиктәрендә матурлыҡ хистәре тәрбиәләү;
-
- Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре** :
- **Уҡыу.Текст менән эш**
- **Текст менән эш:мәғлүмәт эҙләү һәм уҡығанды аңлау.**
- Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:
- -текста факттар, мәғлүмәттәр табырға;
- -текстың темаһын һәм төп фекерен билдәләргә;
- -тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлергә, план төҙөргә;
- -текстағы төп ваҡиғаларҙы айырырға һәм уларҙың эҙмә-эҙлелеген билдәләргә;
- -текста һүрәтләнгән объекттарҙы бер-береһе менән сағыштырырға;
- -билдәһеҙ рәүештә бирелгән мәғлүмәтте аңлау;
- -һүҙ, схема, таблица, диаграмма формаһында бирелгән мәғлүмәтте аңлау;
- -тексты унда бирелгән мәғлүмәт буйынса ғына түгел, ә жанры, структураһы, һүрәтләү саралары буйынса аңлау;
- -төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу;
- -һүҙлектәр менән эш итә белеү.
- **Текст менән эш: мәғлүмәтте үҙгәртеү һәм интерпретациялау.**
- Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:
- -тексты ҡыҫҡа һәм тулы итеп, яҙма рәүештә һәм телдән һөйләргә;
- -факттарҙы текстың дөйөм идеяһы менән тура килтерергә, текста күрһәтелмәгән ябай бәйләнештәр булдырырға;

- -тексҡа таянып һығымта яһарға, аргументтар табырға;
- -текстың төрлө өлөшөндәге мәғлүмәтте дөйөмләштерергә;
- -тексҡа таянып ҡуйылған һорауға яуап бирерлек монологик һөйләмдәр төҙөргә.
- **Текст менән эш: мәғлүмәтте баһалау.**
- Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:
- -уҡылған текст буйынса баһаһын һәм үҙ фекерен әйтергә;
- -текстың йөкмәткеһен, структураһын һәм тел үҙенсәлектәрен баһаларға;
- -уҡылған йәки тыңланған текст нигеҙендә фекер алышыу диалогында ҡатнашыу.

Предмет һөҙөмтәләре:

- телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле булыуы, телдең мәҙәниәттән айырылғыһыҙ булыуы тураһында төшөнсә алыуҘ
- туған әҙәбиәттең башҡорт халҡы тормошондағы урыны, уны башҡа халыҡтар әҙәбиәттәре менән уртаҡлығы һәм үҙенсәлеге тураһында белем алыу;
- туған тел тураһындағы фәнни мәғлүмәттәрҙе үҙләштереү, уның берәмектәренең һәм кимәлдәренең үҙ-ара бәйләшенен аңлау;
- башҡорт теленең лексикаһын һәм фразеологияһын,орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик нормаларын үҙләштереү;
- телмәр этикеты нормаларын белеү;
- тел берәмектәрен, грамматик категорияларҙы таныу һәм анализлай алыу, тел берәмектәрен телмәр ситуацияһында урынлы һәм дөрөҫ ҡулланыу;
- һүҙгә, һүҙбәйләнешкә, һөйләмгә төрлө типтығы анализ (фонетик, һүҙъяһалыш, лексик, морфологик, синтаксик) яһай белеү, уларҙы рус теле менән сағыштыра алыу;
- телмәр практикаһында лексик, грамматик синонимияның мөмкинлектәрен аңлау, уларҙы дөрөҫ ҡуллана белеү;
- әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе рус әҙәбиәтендәгеләре менән сағыштыра, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы, үҙенсәлекле яҡтарын таный белеү;
- әҙәби текстарҙы анализлағанда, туған телдең эстетик функцияһын баһалай белеү.

## 2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

### 1 класс

1-се класта һөйләү һәм яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә һәм өс этаптан тора:

1. Әлифбаға тиклемге осор.(16 сәғәт)

Башҡортостан. Танышыу. Минең мәктәбем. Минең яратҡан уйындарым, уйынсыҡтарым. Беҙ һанарға өйрәнәбеҙ. Ниндәй төҫ матур?  Йәшелсәләр. Емештәр. Телмәр өндәре. Һуҙынҡы өндәр. Нәҙек һуҙынҡылар.Тартынҡы өндәрҙе аңлатҡан хәрефтәрҙең функцияһы. Хәбәр һөйләм.  Һорау һөйләм.

2. Әлифба осоро. (11 сәғәт)

Башҡорт теленең алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре менән танышыу. Башҡорт һәм рус телдәрендә А, О, Ы, Э хәрефтәрен һәм өндәрен сағыштырыу. Үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Башҡорт телендә В хәрефенә фонетик анализ.Баҫымлы ижек. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһе.

3. Әлифбанан һуңғы осор. (6 сәғәт)

Һөйләм. Ике составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Диалог.

2 класс

Танышыу. (3 сәғәт)

Башҡорт теленең алфавиты. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары. Ижек. Баҫым. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә интонация.  Тыныш билдәләре.

Минең мәктәбем. (7 сәғәт)

Исем. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Сифат. Сифат дәрәжәләре тураһында башланғыс төшөнсә. Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре тураһында башланғыс төшөнсә. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше.

Минең республикам. (6 сәғәт)

Ҡайҙа йәшәйһең? һорауы. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Баҫым. Беҙ ҡайҙа? һорауы. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү.

Мин һәм минең ғаиләм. (7сәғәт)

Ҡылымдың зат ялғауҙары. Унын алмашы. Мин, һин, ул алмаштары. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Ҡайҙан? һорауы. Билдә һүҙҙәр. Нимә менән? һорауы.

Мин һәм минең дуҫтарым (7 сәғәт)

Ярҙамсы һүҙҙәр. Парлы яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Афавит. Цц хәрефе. Чч. Щщ хәрефтәре. Нимә эшләй? һорауына яуап булыусы һүҙҙәр. Кем? Нимә? һорауҙарына яуап булыусы һүҙҙәр

Мине уратып алған донъя. (4 сәғәт)

Һөйләм. Өндәү билдәһе. Һорау һөйләм. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һөйләмдә һүҙбәйләнеш. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Тартынҡыларҙың сиратлашыуы. Тиң киҫәктәр. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.

3 класс

1. Танышыу 2 – сәғәт.

Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Башҡорт алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре.

2. Минең мәктәбем 6 – сәғәт.

Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Ярай, ярамай, мөмкин һүҙҙәренең ҡулланышын активлаштырыу.

Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Ярай, ярамай, мөмкин һүҙҙәренең ҡулланышын активлаштырыу.

3.Минең республикам- 6 сәғәт.Башҡортостанда иҫтәлекле урындар, күренекле шәхестәр тураһында әҫәрҙәр уҡырға, һорауҙар бирергә, һығымта яһарға. Уҡыу материалын өйрәнеү процесында диалогтарҙа ҡатнашырға.Мин һәм минең ғаиләм7 - сәғәт. Ғаилә ағҙалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөгөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.

4 Мин һәм минең дуҫтарым 6 - сәғәт.

Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, намыҫлы, егәрле кешеләр һәм уларҙың эштәре; курҡак, алдаксы, ялкау кешеләр тураһында әҫәрҙәр укырға һәм һөйләргә; кешеләрҙең яҡшы сифаттарын үҙләштерергә. Данлы кешеләр менән осрашыуҙарҙа ҡатнашырға, улар тураһында альбомдар төҙөргә, ишеткәндәр буйынса һүрәттәр төшөрөргә, әңгәмәләрҙә ҡатнашырға.

Эште, процесты белдереүсе һүҙҙәр

5..Мине уратып алған донъя 4 - сәғәт.

Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үкемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Тәбиғәткә һаҡсыллыҡ тураһында һөйләшеүҙәр.Башҡорт телендә синоним һүҙҙәрҙе сағыштырыу, ҡылымдарҙың заман формаларын, ҡаршы ҡуйыу теркәүестәрен практик үҙләштереү. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу.

4-се класс

Танышыу. (2 сәғәт)

Һөйләү телмәре. Эске телмәр. Далог. Һандарҙың грамматик үҙенсәлектәре.

Минең мәктәбем. (10 сәғәт)

Өндәш һүҙҙәр. Тарҡау һөйләм. Аныҡлаусы. Тултырыусы. Хәл. Тиң киҫәктәр. Монолог. Диалог. Эйә менән хәбәр.Башҡорт теленең алфавиты (ҡабатлау). Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәре (ҡабатлау). Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Исемдең эйәлек категорияһы. Сифат. Төп һәм шартлы сифаттар.

Минең республикам.(5 сәғәт)

Һүҙбәйләнеш. Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Тамырҙаш һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәр. Сифат дәрәжәләре. Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре. Уртаҡ ҡылым. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше. Һан. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың грамматик үҙенсәлектәре.

Мин һәм минең ғаиләм. (9 сәғәт)

Килештәр. Сифат. Яһалма сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. Төп һандар. Алмаштар.Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре.

Мин һәм минең дуҫтарым. (4 сәғәт)

Ҡылым. Ҡылымдың заман формалары. Берлек һәм күплек һан. Киләсәк заман. Хәҙерге заман. Үткән заман.

Мине уратып алған донъя. (4 сәғәт)

Алмаш. Алмаш төркөмсәләре. Рәүеш. Рәүеш төркөмсәләре. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре: бәйләүес, теркәүес, ымлыҡ. Синтаксис. Һүҙбәйләнеш. Ябай һөйләм. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Ҡушма һөйләм. Һөйләмдең интонация буйынса төрҙәре.

## Тематик планлаштырыу

| № | Тема | Сәғәт һаны, кластар | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 1 | Әлифбаға тиклемге осор | 18 | | | |
| 2 | Әлифба осоро | 9 | | | |
| 3 | Әлифба аҙағы осоро | 6 | | | |
| 4 | Хәрефтәр һәм өндәр | | 3 | | 2 |
| 5 | Һүҙ | | 10 | | |
| 6 | Морфология. Исем | | 19 | | 6 |
| 7 | Ҡылым | | | | 8 |
| 8 | Сифат | | | | 5 |
| 9 | Һан | | | | |
| 10 | Синтаксис | | 2 | | 4 |
| 11 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү | | | | 2 |
| 12 | Һүҙ составы һәм һүҙъяһалыш | | | | 7 |
| | Бөтәһе | 33 | 34 | 34 | 34 |